# *Акмулла исеме мәңгелек*

**М. Акмулла тормошо һәм ижады буйынса *башҡорт халҡы мәҙәниәте тарихы* дәресе**

*Кәримова Г.Я., Туймазы педагогия колледжы уҡытыусыһы*

Туймазы, 2011

## М. Аkмулла тормошо һәм ижады буйынса *башkорт халkы мәҙәниәте тарихы* дәресе

**Маkсаттар:** 1. М Аkмулла тормошо һәм ижады буйынса мәғлүмәт менән таныштырыу.

2. Аkмулла шиғырҙарының идея-тематик йөкмәткеһен асыу, шағир күтәргән проблемаларҙың хәҙерге заманда ла актуаль икәнлеген күрһәтеү.

3. Студенттарҙы үҙ аллы һәм төркөм эсендә эшләү күнекмәләренә өйрәтеү, фәнни тикшеренеү эштәренә йәлеп итеү, ижади һәләттәрен үҫтереү.

4. Әҙип шәхесе өлгөһөндә йәштәрҙә әҙәп-әхлаk сифаттарын тәрбиәләү, Аkмулла менән ғорурланыу тойғоһон уятыу.

5. Бөгөнгө көндә халkыбыҙҙың Аkмулланы онотмауын күрһәтеү.

**Йыһазлау:** магнитофон, Аkмулла ижады хаkында китаптарҙан күргәҙмә, компьютер, экран, Башkортостан картаһы. Парталарҙа – Аkмулла шиғырҙарынан өҙөктәр яҙылған карточкалар, һүҙлектәр, логик мәғәнәүи моделдәр яһар өсөн схемалар.

**Төркөмдәр өсөн түбәндәге таратма карточкалар**:

1. Башkортостан картаһы.
2. М. Аkмулла тормошо һәм ижадынан төп даталар(башkорт һәм рус телдәрендә)
3. Ғалим Ғ.Kунафиндың “Олуғ шәхесебеҙ” исемле мәkәләһе. (Kунафин Ғ. Олуғ шәхесебеҙ. // Ағиҙел. – 2001. - № 12. - 158-се бит)
4. Аkмулла шиғырҙары (башkорт һәм рус телдәрендә)
5. М.Аkмулла хаkында бөгөнгө шағирҙарҙың шиғырҙары.

**Түбәндәге темалар буйынса презентациялар һәм уkытыусыға ярҙамға теоретик материалдар** (колледж студенттарының тикшеренеү эштәре)

1. «Ғалим һәм яҙыусыларыбыҙ Аkмулла хаkында».
2. «Аkмулла образы һынлы сәнғәттә».
3. «М. Аkмулла исемендәге премия лауреаттары».

**Дәрестә kулланылған методтар:** үҙ аллы эш, сағыштырыу методы, уkытыусы һөйләүе, тикшеренеү, әңгәмә, күргәҙмәлек, мәғлүмәти технологиялар,өлөшсә эҙләнеү.

**Төшөнсә, терминдар:** жанр, хитап, мәрҫиә, мәдхиә, мәktүп, әҙәп, шөкөр, иман, сабыр һ.б.

**Предмет – ара бәйләнеш:** һынлы сәнғәт, әҙәбиәт, әҙәбиәт теорияһы, география.

**Дәресте үткәөреү ваkыты: 80 минут**

*Дәрес планы*

| № | *Дәрес этаптары* | *Ваkыт* |
|---|---|---|
| 1. | Инеш һүҙ | 2 мин |
| 2. | Дәрестең маkсатын билдәләү. Әңгәмә. | 3 мин |
| 3. | Төркөмдәргә эште аңлатыу. | 3 мин |
| 4. | Төркөмдәрҙең үҙ аллы эше, тикшеренеүе. | 15 мин |
| 5. | I төркөм яуабы. «Аkмулла эҙҙәре буйлап». | 5 мин |
| 6. | «Аkмулла образы һынлы сәнғәттә». Презентация. Уkытыусы һөйләүе. Әңгәмә. | 5 мин |
| 7. | II төркөм яуабы. Шиғырҙар уkыу. Әңгәмә. | 10 мин |
| 8. | М. Аkмулла шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре хаkында уkытыусы һөйләүе. Анализлау | 10 мин |
| 9. | III төркөм яуабы. «Аkмулла образы шиғриәттә». | 10 мин |
| 10. | «Ғалим һәм яҙыусыларыбыҙ М. Аkмулла хаkында». Слайд-шоу. Әҙәбиәт менән таныштырыу. | 5 мин |
| 11. | «М. Аkмулла исемендәге премия лауреаттары». Слайд- шоу. Әңгәмә. | 3 мин |
| 12. | Уkыусыларҙың моделдәрен тикшереү .Баһалау. | 3 мин |
| 13. | Төркөмдәрҙең эшен баһалау. | 3 мин |
| 14. | Дәресте йомғаkлау. | 2 мин |

**Эпиграф**: *Ҡараһаң, Аҡмулланың китабы был,*
*Эсендә — һыуһағанға шәрбәтле һыу.*
*Битенең бере көлөп, бере һүгәр,*
*Тура һүҙе — берәүгә им, берәүгә ыу.*
*М. Аҡмулла.*(*3-сө слайд*)

**Ойоштороу моменты**

**Маҡсатҡа сығыу**

**Уҡытыусы:** М Кәримдең "Тауҙар" исемле шиғырында ошондай юлдар бар:

"Тауҙар кешеләр шикелле -
Бейек булған һайын
Ғүмерҙәре бәхеслерәк,
Яҙмыштары ҡыйын."

Эйе, әҙәбиәтебеҙ киңлегендә Аҡмулла тауы бөгөнгө көндә лә бейек, юғары, ғорур булып ҡала. Елдәргә лә бирешмәй, йәшендәрҙән дә ҡурҡмай. Һәм шулай булып ҡаласаҡ та...

Бөгөнгө дәресебеҙ ошо мәшһүр мәғрифәтсе-шағир Мифтахетдин Камалетдин улы Аҡмулла хаҡында.

Һеҙҙең иғтибарға Ҡаҙакбаев Мөхәмәтйән башҡарыуында "Аҡмулла бәйет"ен тәҡдим итәбеҙ. Тема буйынса белемегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ, дәрестә шағир хаҡында нимәләр белгегеҙ килә, шуны уйлай тороғоҙ, тема һәм эпиграфты дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.

*(Аҡмулла бәйете тыңлана*)

Уҡытыусы эпиграфты уҡый. Дәрестә беҙ Аҡмулланың китабан уҡырбыҙ, "шәрбәтле һыуын татып" ҡарарбыҙ.

Бөгөнгө көндә М. Аҡмулла исеме йәшәй, ул замандаштарыбыҙҙы рухландыра. Яңыраҡ ҡына М. Аҡмулла исемендәге БДПУ алдында уға һәйкәл ҡуйылыуы быға дәлил. Тыуыуына 180 йыл тулыуға ҡармаҫтан, әҙип рухы бөгөнгө көндә онотолмай. Бының сере нимәлә? Аҡмулланың һаман да сафта ҡалыуын нисек аңлатырһығыҙ? Бөгөн дәрестә шул һорауға яуап бирәбеҙ.

Әйтегеҙ, ҡайһы саҡта шағир халыҡ хәтерендә оҙаҡ һаҡлана?

**Студенттар**: 1. Әҙип тормошо башҡалар өсөн өлгөлө булғанда. Ундай кеше юғары әхләҡи сифаттарға булырға тейеш. Халыҡ өсөн йәшәй һ.б.

2. Был әҙиптәрҙең шиғырҙары матур. Унының шиғырҙарын кешеләр ярата.

**Уҡытыусы**: Матур шиғырҙар тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

**Студенттар**: Унда күтәрелгән мәсьәләләр төрлө заманда ла кешеләрҙе ныk kыҙыkһындыра. Шиғырҙары төҙөлөшө үҙенсәнлекле һ.б.

**Укытыусы**: Тимәк, беҙгә дәрестә нимәләрҙе өйрәнергә кәрәк буласаk?

**Студенттар**: - Аkмулла шәхесен, тормош юлын;

- Аkмулла шиғырҙарының идея һәм проблемаларын, уларҙың бөгөнгө көндә актуаллеген;

- шиғырҙары төҙөлөшөн, шағирлыk оҫталығы кимәлен.

**Укытыусы** Шулай итеп, дәрестә түбәндәге мәсьәләләрҙе тикшерәбеҙ *(3-сө слайд).*

1. М. Аkмулла эҙҙәре буйлап. Әҙип биографияһы
2. Аkмулла шиғырҙары.Уларҙың идея-проблематик офоkтары.
3. Шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре. Аkмулла - шиғыр оҫтаһы.
4. Аkмулла исеме бөгөнгө көндә.

**Төркөмдәргә эште аңлатыу.** Төркөмдәргә бүленеп эшләйбеҙ. Һәр төркөм үҙе теләгән проблема буйынса эшләй. Материалдар күп, мин һәр студентkа логик – мәғәнәүи модель буйынса эшләргә тәkдим итәм. *(4-се слайд)(Моделдәр таратыла)* Логик-мәғәнәүи модель – материалдың бөтә үҙенсәлектәрен координат уkтарында туплаған схема-конспект. Һеҙ мөһим тип һанаған яңылыkты, мәғлүмәтте координат төйөндәрендә билдәләп барығыҙ. Кординаттар, уға исемдәр тәkдим ителә. Уларҙа нисә төйөн икәнен үҙегеҙ хәл итегеҙ. Дәрес аҙағында был моделдәрҙе сағыштырырбыҙ, баһаларбыҙ.

**Төркөмдәргә темалар бүленә. Укытыусы һәр төркөмгә эште аңлата** *(5-се слайд)* .

*1 -се төркөм* "М. Аkмулла эҙҙәре буйлап" картаһын төҙөй. Уларға әҙип биографияһы хаkында карточкалар (*Кушымта I*), Башkортостан картаһы *(Кушымта II*) тапшырыла. Аkмулла тормошо хаkында картаға таянып һөйләргә әҙерләнегеҙ.

*2-се төркөм* Аkмулла шиғырҙарында күтәрелгән проблемаларҙы өйрәнә. Һеҙгә Ғ. Ҡунафиндың "Олуғ шәхесебеҙ" исемле мәkәләһе *(Ҡушымта III*), М. Аkмулла шиғырҙары яҙылған карточкалар таратыла (*Ҡушымта IV*). Мәkәлә менән танышығыҙ, шиғырҙарҙы уkығыҙ һәм шағир ниндәй проблемаларҙы күтәргән, шуны һөйләгеҙ. Яуап биргәндә шиғырҙарҙан өҙөктәрҙе тасуири уkып күрһәтегеҙ.

*3-сө төркөм* бөгөнгө шағирҙарҙың Аkмулла хаkындағы

шиғырҙарын уҡый *(ҠушымтаV)*. Һеҙгә әҙип образы нисек асылғанын тикшерергә кәрәк.

**Төркөмдәргә 15 минут ваҡыт бирелә**. (*Төркөмдәр кәңәшләшеп эшләй. Уҡытыусы ярҙам итә.*)

**I төркөм вәкилдәре яуап бирә**. Студенттар, таҡталағы картаға таянып, Аҡмулланың тормош юлы хаҡында һөйләй. Яҙмышы еңелдән булмауы, төрлө ерҙәрҙә-ҡаҙаҡ далаларында, башҡорт ауылдарында йәшәүе, балалар уҡытыуы һ.б. бәйән ителә.

**Уҡытыусы**: Аҡмулла тормошо нимәһе менән фәһемле?

**Студенттар**: Ул-илгиҙәр шағир, һәр ваҡыт ябай кешеләр араһында, тимәк, уларҙың аһ-зарын яҡшы аңлай. Аң-белемгә өндәй. Ябай халыҡты уҡыта. Ауыр тормош юлын кисерә һ.б.

**Уҡытыусы**: Һеҙ рәссам булһағыҙ, шағир хаҡында ниндәй картина яҙыр инегеҙ һәм ни өсөн?

*(Яуаптар)*

**Уҡытыусы**: Ә хәҙер "Аҡмулла образы һынлы сәнғәттә" презентацияһын ҡарайыҡ. Һеҙ күҙаллаған картиналар был күргәҙмәлә бармы икән? (*Презентацияны ҡарау (6-13-сө слайдтар). Уҡытыусы картина репродукциялары, рәссамдар тураһында һөйләй. (ҠушымтаVI).* Картиналар аша замандаштарыбыҙ Аҡмулла хаҡында ниндәй фекер йөрөтә ала?

*(Яуаптар)*

**ЛММ буйынса эш.**

**Уҡытыусы**: Хәҙер логик мәғәнәүи моделдә 1-се “Аҡмулла биографияһы” координат уғын тултырабыҙ. Унан "Аҡмулла образы һынлы сәнғәттә" темаһы буйынса белемдәрегеҙгә таянып шул исемдәге 5-се уҡты тултырығыҙ.

**II төркөм яуап бирә**. Кемдер шиғырҙарҙы тасуири уҡый, кемдер тикшереү һөҙөмтәләрен еткерә.

Шағир ижадында түбәндәге мәсьәләләр күтәрелә *(14-се слайд)*

1. Аҡмулла, үҙе йәшәгән заманда халыҡтың ауыр тормошон күреп, уларҙы уҡырға, белемле, һөнәрле булырға саҡыра.("Башҡорттарым,уҡыу кәрәк").
2. Йәмғиәттең йөҙөн билдәләүсе, халыҡҡа өлгө булырлыҡ мәғрифәтле шәхестәрҙе ололап шиғырҙар яҙа ("Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе").
3. Аҡмулла кешене яҡшылыҡ өлгөһөндә тәрбиә биреү, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләрен ҡуя. Унын өсөн иң ҡиммәт нәмә – кешенең күңел доньяһы, уй-ҡылыҡтары сафлығы ("Нәсихәт").
4. Байлыҡ артынан ҡыуыусы наҙан муллаларҙы, уларҙың ҡуштандарын әсе тәнкитләй ("Нәфсе").

5. Йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлектәр хаҡында уйлана. Ябай халыҡтың ауыр тормошон әсенеп тасуирлай (Өмөт).

6. Тәбиғәт күренештәренә, йыл миҙгелдәренә арнап шиғри әҫәрҙәр ижад итә ("Яҙ").

7. Йәшәү мәғәнәһе хаҡында фекер йөрөтә, фәлсәфәүи әҫәрҙәр яҙа.

**Уҡытыусы**: Шағир күтәргән мәсьәләләрҙең ҡайһыһы бөгөн актуаль тип уйлайһығыҙ? Ни өсөн?

*( Слайдта "Нәсихәттәр" шиғыры сыға. (15-се слайд).* Шиғырҙы тағы бер ҡат уҡып сығығыҙ. "Нәсихәттәр" шиғырында иң кәрәкле нәмәләр менән һеҙ килешәһегеҙме? *(һүҙлектән был һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлау)*

Иман, намыҫ, аҡыл, әҙәп, сабыр, ихлас. Был сифаттар замандаштарыбыҙҙа бармы икән? Аҡмулланың фекерҙәре менән һеҙҙең фекерҙәрегеҙ тап киләме? Бөгөнгө көндә кеше ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Һеҙ был нәсихәттәрҙең ҡайһынынһын үҙ балаларығыҙга еткерер инегеҙ?

*(Яуаптар)*

Бөгөн әйләнә-тирәбеҙҙе эскелек, наркомания һәм башҡа ҡот осҡос кире күренештәр ҡаплап алған. Бөтөн насарлыҡтарҙан ҡотолоу юлы имандыр. Ул иһә - күңел матурлығы, йән сифатлығы, рухи байлыҡ. Иманлы кешенең күңеле саф, йөрәге таҙа. Ул ата-әсәһен хөрмәт итә, етемдәр менән яҡшы мөнәсәбәттә була, вәғәҙәһенә тоғро, аҙғынлыҡҡа, хәрәмгә бармай, кеше өлөшөнә теймәй. Иман-ул таҙалыҡ. Тимәк, кеше иң беренсе сиратта, шәфҡәтле, фиҙакәр, ихлас, йомарт булырға тейеш. Иманлы кешеләр йәшәгән ер тыныс та, ырыҫлы ла булыр. Үҙебеҙҙә Аҡмулла ҡылыҡһырлаған күркәм сифаттар тәрбиәләйек.

**ЛММ буйынса эш.**

**(***Студенттар үҙ аллы моделдең 2-се, 3-сө уҡтарын тултыралар)*

**Уҡытыусы**: Кавказ халыҡтарында бер фекер йәшәй: кеше 30 йыл уҡырға, 30 йыл сәйәхәт итергә, 30 йыл күргән белгәндәрен башҡаларға еткерергә тейеш. Аҡмуллаға 64 йыл йәшәргә насип була. Уҡырға ла өлгөрә. Моғайын, ғүмере буйы уҡыйҙыр ҙа. Сәйәхәт итә, кешеләрҙе аң-белемгә, әхлаҡҡа өйрәтә. Туғандаш халыҡтар араһында йәшәү уға күп нәмәләр бирә. Был унын шиғриәтенә лә йоғонто яһай-ул ижадында төрлө жанр, төрлө шиғри формалар ҡуллана. Быны беҙ "Аҡмулла шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре" схемаһында күрербеҙ.

*(Экранда схема күрһәтелә (16-сы слайд). Уҡытыусы Аҡмулла шиғырҙарының жанр, рифма үҙенсәлектәре хаҡында һөйләй*

*(Ҡушымта VII).*

Ошо һөйләгәндәргә таянып, Аҡмулланың нindәй шағир икәнлеген күрәбеҙ?

**Студенттар**: М.Аҡмулла урта быуаттар төрки һәм башҡорт яҙма әҙәбиәтенең дә, халыҡ ижадының да, ауыҙ-тел әҙәбиәтенең дә жанрҙарын бик һәйбәт белгән. Яҙма әҙәбиәт һәм сәсәндәр традицияларына иркен таянған.

**ЛММ буйынса эш.**

**(***Студенттар үҙҙәренең моделе буйынса эшләйҙәр. 4-се "Аҡмулла шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре" координата уғын тултыралар.)*

**III төркөм яуап бирә** *(17-се слайд)*. Мифтахетдин Аҡмулла шәхесе, ижады бөгөн күптәрҙе ҡыҙыҡһындыра. Уның менән һоҡланалар, рухланалар. Аҡмулла рухынан башҡорт шағирҙары ла илһам ала. Р.Ниғмәтуллиндың «Аҡ нур» драматик поэмаһы, Ф.Туғыҙбаеваның «Аҡмулла» шиғыры, Р.Солтәнгәрәева «Аҡмулла» ҡобайыры, Р.Шәкүрҙең «Аҡмулланың тыуған яҡтарында», М. Ямалетдиндың «Аҡмулла аманаты» шиғри әҫәрҙәре әҙиптең яҡты образын күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Ф.Туғыҙбаеваның күләме менән ҙур булмаған «Аҡмулла» шиғыры кинәйә юлы менән ҙур фекерҙәрҙе, мәғәнәле һүҙҙәрҙе үҙ эсенә ала. Ул мәғрифәтсе шиғырҙарының шиғриәте халыҡты тоғролоҡҡа өйрәтеүе, быуаттар буйы милләт балаларын хаҡ юлға төшөрөү кеүек изге эштәрҙе данлай.

Билдәле сәсәниә Р.Солтангәрәева үҙенең ҡобайырында Аҡмулланың бөйөклөгөн иҫбатлай:

Аҡмулла! - изге үҙең
Табынам бағып йөҙөң.
Таҙарам уҡып һүҙең
Таянам уҡып һүҙең.

Шулай итеп, бөгөнгө уҡыусыларыбыҙ Аҡмулла шәхесен уның шиғырҙары аша ғына түгел, ә яҙыусылар ижад иткән әҫәрҙәре аша ла өйрәнә ала. Аҡмулланың ҡатмарлы яҙмышы, уның халыҡ шағиры булып өлгөрөүе, кешеләргә мөнәсәбәте — бөтәһе лә күҙ алдына килә.

*(Студенттар шиғырҙарҙан өҙөктәрҙе тасуири уҡыйҙар)*

**Уҡытыусы**: Башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе М.Аҡмулла образы прозала, шиғриәттә, драматургияла, ғилми хеҙмәттәрҙә һәм, ғөмүмән, әҙәбиәттә бөгөнгә көнгә тиклем ярайһы уҡ сағыу яҡтыртылған. Әҙәбиәт өлкәһендә эшләгән әҙиптәребеҙҙең ижади әҫәрҙәрендә сағылдырылған ялҡынлы сәсәндең образы тураһында презентацияны ҡарап үтәйек.

*("Ғалим һәм яҙыусыларыбыҙ М. Аҡмулла хаҡында" презентацияһы(18-20-се слайдтар). Уҡытыусы һөйләүе (Ҡушымта VIII).*

**ЛММ буйынса эш.**

(*Студенттар моделдә "Аkмулла образы башkорт әҙәбиәтендә" уғын тултыралар.)*

**Уkытыусы: Дәрес башында kуйған һорауға яуап бирәйек. Аkмулла бөгөнгө көндә лә беҙҙең сафта. Бының сере нимәлә?**

**Студенттар**:Ул халыkты аң белемгә саkыра. Әҙәпле, әхләkи сифаттарға эйә булырға өндәй, үҙенең йәшәйеше, булмышы менән быны иҫбатлай. Шиғырҙарында күтәрелгән мәсьәләләр бөгөнгө көндә бик тә актуаль. һ.б.

**Уkытыусы**: Аkмулла - уkытыусы. Унының юлын дауам итеүселәр ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш тип уйлайһығыҙ?

(*Яуаптар*)

Ысынлап та, Миәкә районы хакимиәте Башkортостан сәнғәте һәм әҙәбиәте өлкәһендә эшләүсе, Аkмулла идеяларын үҫтереүсе замандаштарыбыҙға премия булдырҙы. М. Аkмулла исемендәге премия лауреаттары менән танышайыk. Улар – шағирҙың вариҫтары.

*("Аkмулла исемендәге премия лауреаттары" Презентация kарау)*

**ЛММ буйынса эш.**

**Уkытыусы**: Хәҙер логик – мәғәнәүи моделегеҙҙең аҙаkkы "*Аkмулланы мин өр-яңынан астым...*" уғын тултырайыk. Әҙип хаkында нимәләр белдегеҙ, шуларҙы төйөндәргә яҙып сығығыҙ. *(Студенттар уkты тултыралар. Модель буйынса эште тамамлайҙар).* Кем үҙ моделе хаkында һөйләргә теләй, рәхим итегеҙ. *(Студенттар һөйләйҙәр. Башkалар өҫтәйҙәр).* Тимәк, күптәрегеҙҙең моделе беҙ тәkдим иткән моделгә оkшаған. Слайдkа күҙ һалығыҙ.*( Уkытыусы, слайдтағы логик мәғәнәүи-моделгә таянып, тема буйынса йомғаk яһай. Студенттарҙың ЛММ буйынса үҙ аллы эштәрен баһалай.)* Артабан төркөмдәрҙең эштәрен баһалайыk.

*(Төркөмдәр бер-береһенең эштәрен баһалай.)*

**Йомғаkлау**

**Уkытыусы**: Р. Фәхретдинден шундай һүҙҙәре бар. "Әҙип һәм ғалимдары булмаған халыk бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләрен онотkан халыk яkлаусыһыҙ, әҙәбиәте булмаған милләт рухһыҙ". "Эйе, беҙҙең халыk бәхетле, милләтебеҙ рухлы. Мәшһүр кешеләребеҙҙе онотмайыk. Аkмулла исеме онотолорға тейеш түгел.

Дәрес өсөн ҙур рәхмәт. Һау булығыҙ!

## *Ҡулланылған әҙәбиәт*


1. Аkмулла. Шиғырҙар. - Өфө: Китап,2006.-248 бит.
2. Ахметвалеева С.В. “Мифтахетдин Акмулла — просветитель и мыслитель 19 века”. // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2002. - №2.
3. Вилданов Ә. Аkмулла – яkтылыk йырсыһы. Өфө: Башkортостан китап нәшриәте, 1981й. - 168 бит.
4. Гильметдинов Д. Акмулла — Серебряный звон нашего века”. // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2006. - №2 – 50-се б.
5. Иҙелбаев М. М. Аkмулла шиғриәтендә йырауҙар һәм сәсәндәр ижады традициялары. // Башkортостан уkытыусыһы. - 2006. - №3. - 35-се бит.
6. Ишкәев Л. “Аҡмулланың аҡ юлдары”. // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2005. - №6. – 23-25-се б.
7. Ишҡолова Ғ. Һүрәттәрҙә - шағир яҙмышы. //Ватандаш. – 2005. - № 2. – 187-се б.
8. Культура Башкортостана.Учебник для 8 класса//С.А.Галин и др.- Уфа: Китап, 2003. - 264с.
9. Кунафин Г. Поэтическое эхо прошлого. - Уфа: Китап, 2004. - 316с.
10. Ҡунафин Ғ. “Светоч башкирской поэзии и тросветительской мысли”. // Ватандаш. – 2006. - №7. -116-129-сы биттәр.
11. Ҡунафин Ғ. Олуғ шәхесебеҙ. // Ағиҙел. – 2001. - № 12. - 158-се бит.
12. Сирусина Ы. “Аҡмулла аҡылы, Аҡмулла һабаҡтары” // Башҡортостан уҡытыусыһы. – 2003. - № 11.
13. Харисов Ә. Башkорт халkының әҙәби мираçы. - Өфө: Башkортостан китап нәшриәте, 1965. - 415 бит.
14. Хөсәйенов Ғ.Б. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. - Өфө: Китап, 2006. - 248 бит.
15. Шакур Р. Звезда поэзии. Башкирский поэт-просветитель М. Акмулла. - Уфа: Китап, 2006. - 200с.
16. Шәкүр Р. Арҙаҡлы башҡорттар. Ғилми-биографик очерктар. - Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1998. – 304-се б.
17. Шәрипова З. Башkорт әҙәби фекере. - Өфө: Китап, 2008.
18. М.Аkмулла. Электрон әсбәп. Төҙөүсеһе Алчинова А. Етәkселәре Кәримова Г.Я.,Нәсибуллин А.Ф. Туймазы,2009